*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Йырҙар ерҙә ҡала

Йыш ҡына беҙ аяҙ кистәрҙә күккә ҡарайбыҙ ҙа йондоҙҙарға һоҡланабыҙ. Бихисап күп улар. Алыҫтан-алыҫҡа балҡып, емелдәп, ҡара төндәрҙе биҙәп торалар. Берәүҙәре — үтә яҡты, икенселәре — баҙығыраҡ. Ерҙә лә шундай йондоҙҙар бар бит әле. Әҙәбиәт, сәнғәт, фән йондоҙҙары. Сәнғәт йондоҙҙары айырыуса сағыу, сөнки улар күңелдәргә илһам өләшә, рухи көс өҫтәй.

Йырсы Хәбир ағай Ғәлимов та башҡорт сәнғәте күгендә ана шул балҡыған йондоҙҙарҙың береһе (1905-1996). Быйыл халҡыбыҙ уның 95 йыллығын билдәләп үтте.

Хәбир Талип улы Ғәлимов 1905 йылдың 5 февралендә Салауат районының Лағыр ауылында тыуған. Халҡыбыҙҙың милли батыры Салауат Юлаев эҙҙәренә баҫып йөрөгән ул. Танылған яҙыусы Баязит Бикбайҙың уны ошо батыр яҡташы менән сағыштырып, «Йырҙар Салауаты» тип атауы һис тә осраҡлы түгел. Сөнки Хәбир Ғәлимов Башҡортостандың профессиональ вокал сәнғәтендә беренселәрҙән булды һәм ғүмере буйы ошо һайлаған юлына тоғро ҡалды.

Лағыр ауылының гүзәл тәбиғәте, талғын ғына тулып аҡҡан Әй һыуы, тирә-йүнгә һеңгән Салауат рухы Хәбир ағайҙы йырға-моңға ғашиҡ итеп үҫтерә.

1927 йылда Хәбир Ғәлимовты хәрби хеҙмәт үтергә Өфөгә ебәрәләр. Хеҙмәттәш дуҫтарының береһе, яҡташы — Дыуан районының Иҫке Хәлил ауылы егете, булаcаҡ яҙыусы Низам Ҡәрипов Хәбирҙең йырлауын һоҡланып тыңлай, уны художестволы үҙешмәкәрлеккә йышыраҡ йөрөргә өгөтләй. Ул ғына ла түгел, киләсәктә кәрәге тейер, тип, рус телен өйрәтә башлай. Хеҙмәт иткән часть командиры ла Хәбирҙең ынтылышын хуплай һәм 1928 йылда уның ярҙамы менән Хәбир Ғәлимовты йырларға радиоға саҡыралар. Был саҡта Өфөләге Ҡыҙыл Армия йортоноң музыка етәксеһе булып композитор һәм драматург Хәбибулла Ибраһимов эшләй. Тап ошо осрашыу башҡорт музыкаһын ихлас яратҡан ике талант эйәһен дуҫлаштыра һәм Хәбир ағайҙың киләсәктә һайлаясаҡ һөнәрен билдәләй.

Армия сафында хеҙмәт срогы тулғас Хәбир Өфө театр техникумына уҡырға инә. 1929 йылдың яҙы уны Башҡорт академия драма театрына алып килә. Көндөҙ техникумда уҡый, кистәрен театрҙа йырлай, бәләкәйерәк ролдәрҙе уйнай, күмәк сәхнәләрҙә ҡатнаша. Театр менән гастролдәргә лә сыға ул.

Шулай, 1932 йылда театр Ҡазанға барғас, ҙур концерт ҡуйһәтә. Ул заманда киң танылған йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Хәбир Ғәлимов та сәхнәгә сыға. Ғ.Әлмөхәмәтов электән дә йәш йырсыға иғтибар итеп килгән икән, һәм концертта Хәбирҙең уңышлы сығышы, йырҙары тамашасылар тарафынан көслө алҡыштырға күмелеүе уны талантлы яңы йырсы тыуыуына тағы ла бер ҡат инандыра.

— Туғаным, — ти ул һуңынан, — һинең урының драма театрында түгел, ә операла!

Билдәле булыуынса, Ғәзиз Әлмөхәмәтов 1932 йылда П.Чайковский исемендәге Мәскәү консерваторияһы эргәһендәге башҡорт студияһын асыуға өлгәшә. Унда уҡыу өсөн һайлап алынған талантлы йәштәр төркөмөнә Хәбир Ғәлимов та эләгә. Ул профессор Сперанский класында уҡый һәм уның яратҡан шәкертенә әйләнә. Тәрән тембрлы, бай милли колоритлы тауыш педагогик эш тә талап итә.

Мәскәү консерваторияһын тамамлаған Зәйтүнә Илбаева, Баныу Вәлиева, Вәли Галкин, Ғабдрахман Хәбибуллин, Маһира Мәҡсүтова, Ольга Калинина-Сыртланова, Мәрйәм Ғабдрахманова, Шаһиҙә Вәлиәхмәтова һәм Хәбир Ғәлимовтар 1938 йылда Өфөгә әйләнеп ҡайта. Танылған музыкант, дирижер Петр Славинский менән

бергә улар Башҡорт опера һәм балет театрының төп көсөн тәшкил итә.

1934 йылдың 14 декабре башҡорт сәнғәтендә билдәле дата: был көндө Д. Паизиэллоның «Тирмәнсенең һылыу ҡатыны» операһы менән РСФСР-ҙа тәүге милли опера һәм балет театры асыла. Был консерватория тамамлаған талиптарҙың диплом спектакле була.



Һулдан уңға: Хөсәйен Әхмәтов, Хәбир Ғәлимов, Фәйзи Ғәскәров. 1965 йыл

Киң диапазонлы тауышы менән башҡорт композиторҙарының йырҙарын, айырыуса башҡорт халыҡ йырҙарын ғәжәйеп оҫта башҡарыуы Хәбир Ғәлимовты Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтәге төбәктәрҙә лә танылыуға илтә. Уның башҡарыуындағы «Урал», «Ғайса», «Сибай», «Зөлхизә», «Һандуғас», «Буранбай», «Ҡолой кантон» һәм башҡа башҡорт халыҡ йырҙары 1928 йылдан башлап радио аша яңғырай һәм уның алтын фондына ингән, уларға йырсы тауышының үҙенсәлеге, халыҡ йырының психологик тәрәнлектәрен аса белеү оҫталығы хас.

Был йәһәттән шуны ла әйтеү урынлы: Хәбир ағай Ғәлимов ауылда тыуып үҫеп, консерваторияла белем алған һәм профессиональ йырсы булып киткән тәүге башҡорт егете.

Опера һәм балет театрында эшләү дәүерендә йырсы унда ҡуйылған бөтә опералар ҙа ла төп партияларҙы башҡара һәм беренсе тенор тауышлы актер була. Паизиэллоның «Тирмәнсенең һылыу ҡатыны»нында барон, Чимарозоның «Йәшерен никах»ында Паолино, Чемберджиҙың «Ҡарлуғас»ында — Шатморат, Н.Пейконың «Айһылыу» операһында — Юлай, А.Эйхенвальдтың «Мәргән»ендә — Мәргән, А.Бородиндың «Кенәз Игорь» операһында — Овлур, У. Ғәджибәковтың «Аршин мал алан»ында — Әсҡәр, З. Исмәғилевтың «Салауат Юлаев» операһында Салауат партияларының уға ышанып тапшырылыуы Х.Л. Ғәлимовтың ҙур вокал оҫталығы һәм киң диапазонлы йырсы булыуын дәлилләй.

Хәбир ағай Ғәлимов — «Салауат Юлаев» операһында Салауат партияһын беренсе башҡарыусы.

Ысын талантҡа һәр саҡ баҫалҡылыҡ хас, Хәбир Ғәлимовты замандаштары, коллегалары һәм дуҫтары тап шулай хәтерләй. Ололарға ла, кеселәргә лә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыуын әле лә һоҡланып телгә алалар. Өлкән дуҫы һәм остазы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ғүмер буйы рәхмәт тойғоһо һаҡлай, уның исемен, талантын мәңгеләштереү, хыялдарын тормошҡа ашырыу йәһәтенән күп эшләй. Хәбир ағайҙың тауышы ла, йырҙы башҡарыу рәүеше лә остазыныҡына оҡшаш була. Оҙаҡ йылдар дауам иткән ижади ғүмерендә Хәбир Ғәлимов Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың «Эшсе» опреаһында — Ниғмәт, «Сания» операһында Зыя арияларын яңыса көс һәм юғары кимәлдәге вокал оҫталығы менән башҡарҙы.

1949 йылда Хәбир Ғәлимовты Мәскәү консерваторияһына стажировкаға ебәрәләр. Был осорҙа ул йыш ҡына Мәскәү тамашасылары өсөн концерттарҙа сығыш яһай, Мәскәү театрҙарына йөрөй, башҡала зыялылары менән яҡындан таныша.

Тап ошо йылдарҙа Хәбир ағай Ғәлимовта йышыраҡ сығыш яһау теләге көсәйә һәм ул 1955 йылда филармонияға эшкә күсә.

Концерттарҙа Хәбир Ғәлимовтың башҡорт йырҙарын классик кимәлдә башҡарыуын халыҡ ихлас ҡабул итә, уның сығыштарын көтөп ала. Филармонияның концерт бригадалары менән Башҡортостан буйлап ҡына түгел, Урта Азия республикалары, Татарстанда гастролдәрҙә йыш була, Корея, Монголия кеүек сит илдәрҙә лә сығыш яһарға тура килә уға.

Ярты быуатҡа яҡын ижади ғүмерендә Хәбир Латип улы Ғәлимов йөҙҙән ашыу йыр башҡара, улар араһында башҡорт, татар һәм рус композиторҙарының йырҙары, романстары бар. Төрлө музыка ҡоралдары: ҡурай, баян, фортепианоға ҡушылып, башҡорт халыҡ йырҙарын үҙенә генә хас үҙенсәлек менән башҡарыуға өлгәшә ул. Ҡурайсы Ғата Сөләймәнов, Мөхәммәт

Рәхмәтуллиндар, Наил Ғәлиев, пианинола уйнаусылар Радик Хәбибуллин, Елизавета Крыловалар Хәбир ағайҙың оҫталығына һоҡланып бөтә алмайҙар.

Ә «Һандуғас», «Ҡоҙаса», «Ғайса», «Суҡ муйыл» кеүек башҡорт халыҡ йырҙарын пластинкаға яҙҙырғанда уға Заһир Исмәғилев ҡурайсы булараҡ ярҙам итә. Артабан яҙмыш уларҙы радиола, концерттарҙа, гастролдәрҙә йыш осраштыра. Киләсәктә танылған композитор, профессор, СССР-ҙың халыҡ артисы Заһир Исмәғилев һәм БАССР-ҙың, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Хәбир Ғәлимов ижад юлынан йәнәш атлайҙар. Хәбир ағай күренекле композиторҙың байтаҡ йырҙарын беренсе башҡарыусы булараҡ, З.Исмәғилев әҫәрҙәренән торған концерттар менән сығыш яһай.

Танылған йырсы шәхесенең формалашыуында башҡа бик күп күренекле фән һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән П.Лисициан, С.Лемешевтар менән яҡындан аралашыу ҙа ҙур роль уйнай. Нәжиб Иҙелбай, Рәми Ғарипов, Ҡадир Даян, Баязит Бикбай, Яҡуп Ҡолмой һәм башҡалар уны маҡтап яҙып сыға, уға шиғырҙар арнай.

Хәбир Ғәлимовҡа опера йырсыларынан беренсе булып «РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы» тигән исем бирелә, ул намыҫлы хеҙмәте өсөн ике тапҡыр «Почет Билдәһе» ордены менән бүләкләнгән.